

ҡурҡытып тотҡан үгеҙ Ғәлиулла кеүек, атыңды юҡ ит, тип ҡырт киҫмәне, тик ауыл советы рәйесе менән әрепләшеүен хуп күрмәне. Юғарыға кемгәлер шылтыратып, ғариза яҙҙырып, уны Өфөгә ебәрҙе. Башҡаланан ат тоторға рөхсәт алып ҡайтты Гәрәй ҡарт. Мал батшаһын, изге йән эйәһен һаҡлап ҡала алыуына ифрат та ҡыуанды ул, Аҡбуҙын йәненән дә артыҡ күреп, тағы ла яҡшыраҡ ҡараны. Ҡарсығы иһә: «Был ҡартҡа бөтөнләй ат ене ҡағылды», — тип күршеләренә һуҡранды.

Үгеҙ Ғәлиулла ла Алланың ҡашҡа тәкәһе түгел. Ҡасандыр түргә мендергәйнеләр, инде төшөрҙөләр. Түрәлек бер кемгә лә ғүмерлеккә бирелмәй. Ғәлиуллалар заманы, ҡыҫыу, сикләү ваҡыттары үтте. Инде үгеҙ Ғәлиулла ла йыуашланып, һәүетемсә тыныс ҡына йәшәп ята. Әүәлге колхоз-совхоздарҙың ҡото киткәс, хәҙер Ғәлиулла ла ат башы тотоп донъя көтә. Бәлки, түрәлектән төшөрөүҙәре, ат көнөнә ҡалыуы Ғәлиулла өсөн ҙур язалыр. Мәгәр йомро йәшен ташы мең мәртәбә ҡурҡынысыраҡ.

Тормош көтөү кырандаста дилбегә тотоп ултырыу ғына түгел шул. Донъя — ул бөтмәҫ мәшәҡәт, михнәт, ыҙа сигеү. Ифрат аҙ йәшәйһең, ғәйәт күпте кисерәһең. Изгелек тә бар, йәбер-золомо ла — баш өҫтөндә. Моғайын, кешеләрҙең үҙ-ара алама мөнәсәбәттәренән, яманлыҡтарынан башланалыр ул убыр башы...

Әле ошо яуыздан ҡаса-ҡаса Гәрәй ҡарттың тыны ҡыҫылды, хәле бөттө. Мәгәр ах та ух килеп, йүгерҙе лә йүгерҙе. Аяҡ быуындары ҡалтыранды, тәнтерәкләне, эстән генә туҡтауһыҙ шыбырҙаны:

— Кисер... Эй Хоҙайым, кисерә күр...

Бөтөнләй хәлдән тайған Гәрәй ҡарт аһылдап, ыһылдығы сығып: «Бына әжәлем етте. Шуныһы йәл, Аҡбуҙым менән хушлашмай үләм», — тип әсенеп уйланы. Ҡуҙҙай эске уй-тойғоһонан янып, көйөп, ҡылдай өҙөлөп, рух-йәне менән йәнә Аҡбуҙын саҡырҙы. Тормош үтә михнәтле булһа ла Гәрәйҙең бер ҡасан да үлгеһе килмәне. Йәшәүгә өмөт саткыһын баҙлатып, күңеленән Аҡбуҙының кешнәүе сыңлап үтте.

«Хужам, өн- ауаз һалыуыңды ишеттем, һине ҡотҡарырға килдем», — тигәндәй, ниһайәт, илаһи кешнәү сыңраны. Аҡбуҙы эйәһе менән шар йәшене араһынан елдәй үтте,тояҡтары саҡ-саҡ ҡына утлы йомғаҡҡа теймәй ҡалды. Ни күрһен — убыр уты Аҡбуҙы артынан оса!

— Аһ, алйот! — Гәрәй ҡарт башын ташҡа орорҙай булып үҙен ҡәһәрләне. — Нишләнем мин, нишләнем?..

Ҡалтыранған тауыш менән әллә Хоҙайға, әллә убыр утына ялбарҙы:

— Зинһар, атыма теймә! Зинһар уны ҡалдыр! Мине үлтер! Мине...

Һаман да өҙләкһеҙ йәшнәгән йәшен яҡтыһында Аҡбуҙының ҡайҙа сапҡанын күреп, Гәрәй ҡарт үкһеп ергә ауҙы:

— Бына ҡалай харап итте... Бына нисек яза бирҙе...

Йәндәй күргән аты өсөн үҙе мең үлергә әҙер бит. Тик Аҡбуҙы шар йәшенен — Гәрәйҙең әжәлен эйәртеп, Убыр башының Боланосҡан ҡаяһына елә...





08-2001.p65 132 30.10.01, 11:36
Black

# Билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы һәм сингармонизм

*ғхмүр АҫНАБАЕВ,*
*БДПУ-ныS башњорт теле кафедраєы мідире,*
*профессор*

Дөйөм тел белемендә, билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы Һинд-Европа телдәренә генә хас тигән ҡараш йәшәне, сөнки был телдәрҙә һөйләм эсендә предметтарҙың билдәле йәки билдәһеҙ булыуын күрһәткән махсус грамматик саралар-артиклдәр бар. Мәҫәлән, немец телендә: Ich lese *das* Buch (Мин китапты уҡыйым) — Ich lese *ein* Bich (Мин китап уҡыйым). Алтай, шул иҫәптән төрки телдәрен тикшереүсе ғалимдар был телдәрҙә билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһының булыуын танымаһылар, күрмәнеләр, уға иғтибар ҙа итмәнеләр, сөнки был телдәрҙә, билдәле булыуынса, артиклдәр юҡ.

Тюркологтарҙан беренсе булып был категорияға атаҡлы телсе Н.К.Дмитриев иғтибар итте. Ул үҙенең «Башҡорт теленең грамматикаһы» тигән хеҙмәтендә[1] ошо категорияға махсус туҡтала һәм *был* алмашының билдәлелекте, ә *бер* һанының билдәһеҙлекте белдереүен әйтеп үтә. Н.К.Дмитриевтың был фекере ысынлап та бик ҡиммәт һәм урынлы: *Был китапты якшы яҙғандар. Мин бер китап алдым.* Беренсе һөйләмдә билдәле бер китап тураһында һүҙ бара, ә икенсеһендә ниндәйҙер билдәһеҙ китап тураһында әйтелә. «Бер» һүҙенең әкиәттәрҙә йыш ҡулланылыуы осраҡлы түгел икән: *«Борон-борон заманда бер бабай менән бер әбей йәшәгән, ти...».* Бында бабай менән әбейҙең һаны, уларҙың берәү генә булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынмай, ә уларҙың ниндәйҙер билдәһеҙ булыуы күҙ уңында тотола.

Шулай итеп, Н.К.Дмитриев башҡорт теленең фәнни грамматикаһын яҙғанда, был телдәге билдәлелек - билдәһеҙлек категорияһын күрергә һәм табырға тырышҡан, *был* һәм *бер* һүҙҙәренең артиклдәр функцияһында ҡулланылыуын тойомлаған.

Әммә Н.К.Дмитриевтың ғилми хатаһы шунда: ул башҡорт телен тикшергәндә Һинд-Европа телдәренең законларынан сығып эш иткән, йәғни башҡорт телендә лә артиклдәргә оҡшаған, уларҙы алмаштыра алған элементтарҙы (һүҙҙәрҙе) эҙләгән, башҡорт теленең бөтөнләй икенсе телдәр ғаиләһенә — төрки (тимәк, алтай) телдәренә инеүен онотоп ебәргән. Был уның ғәйебе түгел, ә бәләһелер, сөнки ул, милләте буйынса рус кешеһе булараҡ, тәүге урта белемде рус мәктәбендә алған, рус фәнни мәктәбендә тәрбиәләнгән, шуға күрә лә башҡорт телендәге (һ.б. ҡәрҙәш телдәрҙәге) билдәлелек һәм билдәһеҙлек грамматик категорияһының тәбиғәтен, уның грамматик сараларын тулыһынса аса алмаған.

Был тарихи бурысты башҡарып сығыу атаҡлы телсебеҙ профессор Жәлил Кейекбаевҡа тура килде. Уның раҫлауынса, билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы бөтә телдәрҙә лә бар һәм булырға тейеш, сөнки һәр бер кешенең аңында (ул ниндәй телдә һөйләшеүенә ҡарамаҫтан) предметтар, билдәләр, эш-хәлдәр, төрлө ситуацияға

ҡарап, ике төрлө — йә билдәле, йә билдәһеҙ булып сағыла. Ябай ғына миҫал: *Мин китап укыным — Мин китапты укыным.* Беренсе һөйләмдә ниндәйҙер билдәһеҙ китап тураһында һүҙ барһа, икенсеһендә инде алдан билдәле булған, һөйләүсегә (яҙыусыға) лә, тыңлаусыға (уҡыусыға) ла таныш булған китап тураһында һүҙ бара. Тағы ла: *Әхмәт каланан кайтты — Әхмәт каланан кайткан.* Беренсе һөйләмдең хәбәре билдәле эште белдерә, сөнки һөйләүсе Әхмәттең ҡаланан ҡайтҡанын үҙ күҙе менән күргән, ә икенсеһендә инде билдәһеҙ эш тураһында хәбәр ителә, сөнки һөйләүсе (яҙыусы) Әхмәттең ҡаланан ҡайтҡанын үҙ күҙе менән күрмәгән, ә икенсе кешенән (сығанаҡтан) ишетеп кенә белгән. Миҫалдарҙан күренеүенсә, башҡорт телендә артиклдәр булмаһа ла, предметтарҙың билдәле йәки билдәһеҙ булыуын күрһәтеүсе башҡа саралар булырға тейеш. Ул ғына ла түгел, башҡорт телендә артиклдәр булырға ла тейеш түгел, сөнки ул бөтөнләй икенсе ғаиләгә ҡарай. Әгәр башҡорт телендә артиклдәр булһа, ул һинд-европа телдәренә инер йәки артиклдәрҙең булыуы осраҡлы хәл булыр ине. «Билдәлелек һәм билдәһеҙлек төшөнсәһе (йәки идеяһы), логик категория булараҡ, бөтә кешеләрҙең аңында бер төрлө сағыла һәм үҙенең конкрет грамматик формаһын төрлө телдәрҙә төрлөсә таба»[2]. Шундай һығымта яһаны үҙенең күп йыллыҡ эҙләнеүҙәренән һуң профессор Ж.F.Кейекбаев. Эйе, һинд-европа телдәрендә билдәлелек һәм билдәһеҙлек төшөнсәләре артиклдәр ярҙамында белдерелә, ә башҡа системаға ҡараған телдәрҙә, мәҫәлән, алтай телдәрендә, шул иҫәптән төрки телдәрендә лә, был төшөнсәләрҙе белдереп йөрөүсе башҡа грамматик саралар бар. Ошо концепциянан сығып, Кейекбаев алтай телдәрендә билдәлелек һәм билдәһеҙлек төшөнсәләренең биреләү йәки сағылыу сараларын эҙләп тапты. Был грамматик саралар бик күп төрлө, уларҙы 4 төргә бүлеп төркөмләргә мөмкин: 1) фонетик саралар; 2) морфологик саралар; 3) лексик саралар; 4) синтаксик саралар.

**I. Фонетик саралар**

Фонетик сараларҙың асылы шунда: алтай телдәрендә киң һуҙынҡылар (башҡорт телендә *а-ә* һуҙынҡылары) бик боронғо замандарҙан уҡ билдәһеҙлек төшөнсәләрен, йәғни предметтарҙың, билдәләрҙең, эш-хәлдәрҙең билдәһеҙ булыуын, ә тар һуҙынҡылар *(о, ө, у, ү, ы, е, и)* уларҙың билдәле булыуын белдереү өсөн ҡулайлашҡан булғандар. Был хәл хәҙерге дагур теленең алмаштарында асыҡ сағылыш таба: *би* (мин) - *баа* (беҙ); *ши* (һин) - *шаа* (һеҙ); *ин* (ул) - *аан* (улар)[3]. Күренеүенсә, алмаштарҙың берлегендә тар һуҙынҡы *и* ҡулланылған, сөнки алмаштарҙың берлек формаһы билдәле конкрет төшөнсәне белдерә. Ә уларҙың күплегендә киң һуҙынҡы *а* килгән, сөнки күплек төшөнсәһе билдәһеҙлек төшөнсәһе менән тығыҙ бәйләнгән: *аттар* тигәндән беҙ ике аттан башлап һанауһыҙ күп аттарҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Шулай итеп, был телдә алмаштарҙың күплеге берлегендәге тар һуҙынҡыны киң һуҙынҡы менән алмаштырыу юлы менән генә яһала. Шуға оҡшаш күренеште хәҙерге башҡорт һәм татар телдәрендә лә күрәбеҙ: *ул* алмашының күплек формаһы — *алар* рәүешендә яңғырай (башҡорт телендә был форма йәнле һөйләү теленә ҡараһа, татар телендә ул яҙма телдә лә законлашҡан). Тимәк, башҡорт һәм татар телдәренең бик боронғо сағында *ал* алмашы (дагур телендәге кеүек) *улар* мәғәнәһендә йөрөгән булырға тейеш: *ул* — берлеге, *ал* — күплеге.

Һуңынан *ал* формаһының күплек мәғәнәһе юйыла башлаған, шуға күрә был нигеҙгә күплекте (йәки билдәһеҙлекте) белдереүсе киң һуҙынҡы *а(ә),* һуңынан иң боронғо ябай күплек күрһәткесе *-р* килеп өҫтәлгән. Алтай телдәренә ҡараған тунгус-манжур телдәрендә бөгөн дә *-р* күрһәткесе күплек аффиксы булып хеҙмәт итә. Мәҫәлән, эвенк телендә: *орон* (йорт боланы) — *орор* (йорт боландары); *мурин* (ат) — *мурир* (аттар). Алтай телдәренең, шул иҫәптән төрки телдәренең дә, бер үҙенсәлеге бар: теге йәки был грамматик форма, бигерәк тә аффикстар, торабара үҙенең тәүге мәғәнәһен юғалта башлай, шуға күрә шул уҡ мәғәнәне биргән икенсе аффикстар килеп ҡушыла. Ҡасандыр *ал* алмашы ла күплек мәғәнәһен биргән булырға тейеш, сөнки дагур телендә *ан* алмашы бөгөн дә күплек мәғәнәһен юғалтмаған.

Теге йәки был аффикстың мәғәнәһе юйылыуын йәки бөтөнләй юғалыуын, уның һүҙҙең тамырына ҡушылып үҫеүен билдәле тюрколог Г.Ф.Благова плеоназм күренеше тип атаған һәм уның төрки телдәрендә киң таралыуын таныған[4]. Ысынлап та, плеоназм күренеше бөгөнгө телдә лә осрай: *бе-*



08-2001.p65 134 30.10.01, 11:36
Black

*реһе* һүҙендә ике эйәлек заты ялғауын күрәбеҙ: бер-*е* (сағыштырайык: эт-*е),* бере-е-*һе* (сағыштырайык: кәзә-*һе*). Беренсе ялғау (-е) тартынҡы өндәргә бөткән һүҙҙәргә, икенсеһе — һуҙынҡыларға бөткән һүҙҙәргә ҡушыла. Йәки: ҡай*һы-һы*, ҡай*һы-ны-һы*. Татар теленең һөйләштәрендә лә плеоназм күренеше йыш осрай: *әйбересе бар (әйбере бар* урынына), *итәгесе белән (итәге белән* урынына)[5]. Тимәк, башҡорт һәм башҡа алтай телдәрендә киң һуҙынҡылар (башҡорт телендә *а-ә* һуҙынҡылары) билдәһеҙлек төшөнсәһенә, тар һуҙынҡылар билдәлелек төшөнсәһен белдереү өсөн ҡулайлашҡандар. Ж.Ғ. Кейекбаевтың был асышы хәҙерге башҡорт телендәге "серле" күренештәрҙе аңларға ярҙам итә. Әйтәйек, беҙҙең телдә (башҡа төрки телдәрендә лә) сингармонизм күренеше, бигерәк тә ирен гармонияһы, ныҡлы урын алған: төп башҡорт һүҙҙәренең тәүге ижегендә иренләшкән *о-ө* өндәре килһә, улар һүҙҙең аҙаҡҡы ижектәрендә лә һаҡлана: *тор — тормош — тормошо — тормошоноң — тормошоноҡо; өкө — өкөнө — өкөнөң — өкөнөкө — өкөнөкөләр* һ.б. Әммә бындай һүҙҙәр күплек ялғауын ҡабул итһә, ирен гармонияһы һаҡланмай, боҙола*: тормош-тар, өкө-ләр* (көтөлгәнсә*, тормоштор, өкөлөр* түгел). Йәғни күплек аффикстары эсендә фәҡәт киң һуҙынҡылар (а-ә) ғына килә, сөнки улар ғына күплекте, тимәк, билдәһеҙлекте белдерә ала, ә тар һуҙынҡылар (мәҫәлән, *о-ө* өндәре) билдәлелекте белдереү өсөн ҡулайлашҡан, шуның өсөн улар күплек мәғәнәһен бирә лә, күплек аффиксы эсендә килә алмайҙар. Килеш аффикстары составында ла киң һәм тар һуҙынҡыларҙың ҡулланылыуы бик урынлы һәм законлы: эйәлек һәм төшөм килештәренең аффикстары составында тар һуҙынҡылар килә ала: *тормоштоң, тормошто,* сөнки был килештәр билдәле килеш формалары булып һанала (мәктәп дәреслектәрендә ул килештәрҙе грамматик мәғәнәле килештәр тип атайҙар). Ә башҡа ҡыйыҡ килештәрҙә ирен гармонияһы һаҡланмай: *тормошҡа, тормоштан, тормошта* (көтөлгәнсә *тормошто, тормоштон, тормошто* түгел), сөнки был килештәр, пространство килештәре тип аталып, билдәһеҙлек төшөнсәһе менән тығыҙ бәйләнгән: *урманға, урмандан, урманда* — алыҫмы, яҡынмы, билдәһеҙ булып ҡала.

Тар һәм киң һуҙынҡылар ҡылымдарҙың билдәле һәм билдәһеҙ варианттарын яһауҙа ла ҡатнашҡан. Мәҫәлән, хәбәр һөйкәлешенең өс заманында ла быны күрәбеҙ: *тотто, борҙо, йотто, көлдө, бөктө, бөлдө* — был варианттар хәбәр һөйкәлешенең билдәле (йәки шаһитлы) үткән заман формалары тип йөрөтөлә, сөнки улар яҙыусы йәки һөйләүсе белгән-күргән эште күрһәтә. Ә уларҙың билдәлелеген аффикстарҙағы тар һуҙынҡылар *(о-ө)* тәьмин итә. Әгәр ҡылымдарҙың шул уҡ заман формаһы билдәһеҙ, яҙыусы йәки һөйләүсе шаһит булмаған эште күрһәтһә, уның аффиксы составында билдәһеҙлекте тәьмин итеүсе киң һуҙынҡылар килә: *тотҡан, борған, көлгән, бөлгән* (ирен гармонияһы боҙола, йәғни көтөлгән варианттар (*тотҡон, борғон, көлгөн, бөлгөн*) барлыҡҡа килмәй).

Хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заман формаһы ике аффикс ярҙамында барлыҡҡа килә: 1) *-а/-ә* аффиксы ярҙамында: *ала, көлә* (әгәр ҡылым тамыры тартынҡы өнгә бөтһә — *ал, көл);* 2) *-й* аффиксы ярҙамында: *уҡый, йөрөй* (әгәр ҡылым тамыры һуҙынҡы өнгә бөтһә — *уҡы, йөрө*). Күренеүенсә, хәҙерге замандың беренсе вариантында ла шул уҡ киң һуҙынҡылар килә: *тор-а, көл-ә* (көтөлгәнсә *тор-о, көл-ө* түгел). Шуға күрә лә был заман формаһының мәғәнәһе бик киң, ул хәҙерге заманда эшләнгән эште лә, үткән заманда булған эште лә, ғөмүмән, һәр ваҡыт булып торған эште лә аңлата. Әйтәйек, йыш ҡына үткәндә булып үткән эштәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлағанда, ошо хәҙерге заман формаһын ҡулланалар. Мәҫәлән: "Ҡасим Дәүләткилдеев ... 1887 йылда Өфө губернаһының Көгөн тигән ауылында тыуған. 1914 йылда Петербургтың юғары художество-сәнәғәт училищеһын тамамлаған. Шунан бирле ижади эш менән *шөғөлләнә...* М.В.Нестеров исемен йөрөткән Башҡорт дәүләт музейын төҙөүҙә яҡындан тороп *ҡатнаша.* Өфөләге сәнғәт училищеһында уҡытып, йәш кадрҙар *әҙерләй.* 1947 йылда вафат *була*"[6].

Был ҡылым формаларының мәҡәлдәрҙә ҡулланылыуы ла уның хәҙерге заманды ғына белдермәүен, ифрат киң мәғәнәгә эйә булыуын күрһәтә: *эт өрә, бүре йөрөй.* Профессор М.В.Зәйнуллин раҫлауынса, *ала* һәм *уҡый* формалары "билдәле ваҡытҡа ҡарамаған һәм һәр ваҡыт булып



08-2001.p65 135 30.10.01, 11:36
Black

торған эш-хәлдәрҙе лә белдерергә мөмкин"[7]. Үзбәк телсеһе Д.М.Джураеваның күрһәтеүенсә, *"-а,-й* аффикстары менән яһалған ҡылым формалары асылда "дөйөм" йәки киләсәк заман төшөнсәләрен белдерә"[8]. Хәҙерге ҡаҙаҡ телендә *-а, -й* аффикслы ҡылымдар "үткәндә булған, хәҙерге һәм алда буласаҡ эштәрҙе белдерә, был хәл контекстҡа ҡарай"[9]. Ҡырғыҙ телсеһе И.А.Батманов *-а* аффикслы ҡылымды "хәҙерге-киләсәк заман" тип атаған[10]. Күрәһең, был форманың билдәле генә бер заманды белдермәүен ул иҫәпкә алғандыр.

Шулай итеп, *ала-килә, тора-көлә* формалары билдәһеҙлекте белдереүсе киң һуҙынҡылар ярҙамында яһалған. Ә *уҡый, йөрөй* формаларының *-й* аффиксы ҡайҙан килә? *Ала* һәм *уҡый* формаларының мәғәнәләре тап килә. Шулай булғас, *-й* аффиксы ла билдәһеҙлекте белдереүсе күрһәткес булырға тейеш. Ә билдәһеҙлекте йә киң һуҙынҡылар, йә күплек аффикстары белдерә ала. Боронғо алтай телдәрендә ябай күплек аффикстары булып *-р, -л, -т, -ш, -а(ә)* күрһәткестәре хеҙмәт иткән. Мәхмүт Ҡашғари XI быуатта яҙып ҡалдырған һүҙлегендә төрки телдәрендә ошо ваҡыттарҙа ла *-лар/-ләр* аффиксы менән бер ҡатарҙан *-т* аффиксының да күплек аффиксы функцияһында ҡулланылыуын күрһәткән[11]. Төрки телдәренә алыҫ булһа ла ҡәрҙәш булған угро-фин, монгол телдәрендә үрҙә һаналған ябай күплек күрһәткестәре бөгөн дә үҙҙәренең төп мәғәнәһен юғалтмаған. Мәҫәлән, фин телендә: *talo* (йорт) - *talot* (йорттар); манси телендә: *сали* (болан) - *салит* (боландар); монгол телендә: *нөхөр* (иптәш) - *нөхөд* (иптәштәр) һ.б.[12] Ә башҡорт телендәге *-й* өнө боронғо *-т* өнөнән барлыҡҡа килгән: Орхон-Енисей яҙмаларында *кутук* — башҡорт һөйләштәрендә *kотоk-коҙоk-койоk-койо,* йәки: Орхон-Енисей яҙмаларында *атаk* — яҡут телендә *атах* — тува телендә *адаk* — хакасса *азах* — башҡортса *аҙаk//айаk.* Йәғни хәҙерге *-й* өнө боронғо *-т* өнөнән түбәндәге формула буйынса барлыҡҡа килгән: *т—>д—>з—>ҙ—>й.*[13] Бер әйтемдә ("Көтә-көтә көтөк булдыҡ") боронғо форма һаҡланған, йәғни *т* өнө *й* өнөнә күсмәгән, һөҙөмтәлә телдә айырым ҡулланылмаған, мәғәнәһе лә анлашылмаған бер һүҙ (*көтөк*) әйтем эсендә һаҡланып ҡалған. Әгәр дөйөм закон буйынса *-т* өнө *-й* өнөнә күсһә, әйтем икенсерәк яңғырар ине: *Көтә-көтә көйөк булдыk* (көйҙөк, яндыҡ), әммә әйтемдең бөтә поэтик әйтелеше юҡҡа сығыр ине. Икенсе бер миҫал: телдә *аҙаш* тигән һүҙ бар, ул исемдәре тап килгән кешеләрҙе белдерә. Был һүҙҙең ялғауы ла, тамыры ла асыҡ айырылып күренә: *аҙ-аш.* Әммә был һүҙ *аҙ* (мало) һүҙенән яһалмаған бит. Теге формулаға ҡараһаҡ, был һүҙҙең боронғо формаһы *аташ* булған, ә *ат* — исем тигән һүҙ: атҡаҙанған тигән термин исем ҡаҙанған, данлы исем алған тигәнде анлата. Ҡаҙаҡтар бөгөн дә "атың кем?" тип һорайҙар. Телебеҙҙә *баштан аҙаk* һәм *баштан айаk* (әйтелеше) тигән әйтемдәрҙең икеһе лә бер тигеҙ ҡулланыла, сөнки *аҙаk* һәм *айаk* һүҙҙәре бер сығанаҡтан: боронғо төрки телендә *атаk* рәүешендә булған.

Шулай итеп, башҡорт телендәге *йөрөй, уkый* формалары боронғораҡ *йөрөт, уkыт* формаларынан барлыҡҡа килгән. Ысынлап та, хәҙерге Себер татарҙары телендә *йөрөй* урынына *йөрөт* формаһы ҡулланыла: *цымцырых йөритләр*[14]. Хәҙерге сыуаш телендә лә ҡылымдың хәҙерге заманында *-т* өнө нығынған: *Хирте виçе бригада еçлет (еçлей* түгел) — *Ҡырҙа өсөнсө бригада эшләй.* Ә *-т* күрһәткесенең боронғо күплек (тимәк, билдәһеҙлек) аффиксы булыуына хәҙер шик юҡ. Шулай итеп, ҡылымдың тамыры һуҙынҡыға бөтһә (*уkы, йөрө*), хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заманы билдәһеҙлек төшөнсәһен биреүсе боронғо күплек аффиксы *-т* (хәҙерге телдә *-й)* ярҙамында, ә тартынҡыға бөтһә (*ал, көл*), шул уҡ билдәһеҙлекте белдереүсе киң һуҙынҡылар менән барлыҡҡа килә: 1) *уkый, йөрөй,* 2) *ала, көлә.*

Башҡорт телендәге хәбәр һөйкәлешенең билдәһеҙ киләсәк заманы яҙмышында тар һәм киң һуҙынҡылар үҙенсәлекле роль уйнағандар: тартынҡы өндәргә бөткән ҡылымдарҙың бер төркөмөнән был заман формаһы *-ыр/-ер* аффикстары ярҙамында яһала, йәғни аффикс составында тар һуҙынҡылар *-ы, -е* ҡатнаша: *бар-ыр, kайт-ыр, ас-ыр, яб-ыр, әйт-ер, ултыр-ыр, һикер-ер, ал-ыр, йүгер-ер;* икенсе төркөмөнән *-ар/-әр* аффикстары ярҙамында яһала, йәғни аффикстар составында киң һуҙынҡылар (*-а/-ә*) килә: *бул-ар, кил-әр, бел-әр, көл-әр, эс-әр, ет-әр, тот-ар, сакыр-ар, йығ-ар, бөл-әр* һ.б. Дөрөҫ, беҙҙең орфография киң һуҙынҡылар менән килгән форманы законлаштырмаған, йәғни ул бөтә

ҡылымдарҙа ла фәҡәт *-ыр/-ер (-ор/-өр)* аффикстарын ғына яҙырға ҡуша: *тот-ор, бел-ер, саҡыр-ыр.*

Йыш ҡына яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә орфография законына буйһонмай, киң һуҙынҡылар менән килгән ҡылымдарҙы ҡулланалар: “Хисбулла ағайым уҡығас, *етәр,* — тип ҡарыулашты ул” (З.Биишева. Әҫәрҙәр. I том. - Өфө, 1995. - 84-се бит). Үткән йылда Министрҙар Кабинеты ҡабул иткән бер программаны (“Питьевая вода”) “Башҡортостан” гәзите “Эсәр һыу” тип баҫып сығарҙы (орфография ҡағиҙәләре буйынса “Эсер һыу” булырға тейеш ине).

Хәҙерге тел күҙлегенән ҡылымдарҙың был ике варианттары араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ, уларҙың икеһе лә билдәһеҙ киләсәк заманды белдерә. Әммә тарихи планда, йәғни башҡорт теленең боронғораҡ осоронда уларҙың араһында мәғәнә айырмаһы булған булырға тейеш: аффиксы составында киң һуҙынҡылар килгән варианттары (*тотар, көләр*) ниндәйҙер билдәһеҙерәк эште, тимәк, киләсәк заманды, ә аффиксында тар һуҙынҡылар булған варианты (*барыр, әйтер*) билдәлерәк эште, тимәк, хәҙерге заманды белдергән булырға тейештәр, сөнки киләсәк заман үҙенең эске тәбиғәте менән алда эшләнәсәк эште (эшләнәме — юҡмы?), тимәк билдәһеҙ эште белдерә, ә хәҙерге заман билдәлелек төшөнсәһен бирә, сөнки эш күҙ алдында эшләнеп ята. Хәҙерге әзербайжан телендә ҡылымдарҙың был ике варианты ла әүҙем ҡулланыла, тик, башҡорт теленән айырмалы рәүештә, тар һуҙынҡы менән килгән варианты хәҙерге заманды, ә киң һуҙынҡы менән яһалғаны киләсәк заманды белдерә (дөрөҫ, үҙҙәре хәҙерге-киләсәк заман тип йөрөтәләр): *алыр* (башҡорт телендәге *ала* мәғәнәһен) — *алар* (башҡорт теленең *алыр* мәғәнәһен бирә); *гәлир* (килә) — *гәләр* (килер). Академик М.Ш.Ширалиевтың раҫлауынса, әзербайжан теле диалекттарының һәм һөйләштәренең күбеһенә *-ыр, -ир, -ур, -үр* аффикслы хәҙерге заман формаһы хас[15]. Күренеүенсә, әзербайжан телендә киң һәм тар һуҙынҡыларҙың үҙенсәлеге һәм әһәмиәте ап-асыҡ күренә. Был телдең үҙенсәлеге Ж.Кейекбаев асҡан “билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһы” тигән яңы ҡараштың бик тә нигеҙле икәнен күрһәтә. Башҡорт теленең ҡайһылыр боронғо баҫҡысында ла (әзербайжан телендәге кеүек) *алыр — алар, килер — киләр* тибындағы хәҙерге һәм киләсәк заман формалары булған булырға тейеш, сөнки хәҙерге ҡылымдарҙың ҡайһыһында *-ыр/-ер*, икенселәрендә *-ар/-әр* аффикстары нығынып ҡалған, тик уларҙың икеһе лә билдәһеҙ киләсәк заманды белдереүгә ҡулайлашҡан. Был күренеш башҡорт телендә *-а/-ә* йәки *-й* аффикслы хәҙерге заман формаһының барлыҡҡа килеүе менән аңлатыла. Һуңғы форма күп төрки телдәрендә бөгөн дә юҡ, булғандарында ул дөйөм йәки хәҙерге-киләсәк заман формаһы тип таныла. *Ала—уҡый* хәҙерге заман формаһы төрки телдәрендә һуңғараҡ барлыҡҡа килгән. Доцент М.Әхмәтовтың күрһәтеүенсә, Орхон-Енисей ҡомартҡыларында *бара, килә* тигән ҡылым формаһы бөтөнләй юҡ.[16]

Киң һәм тар һуҙынҡыларҙың әһәмиәте шарт һөйкәлешен барлыҡҡа килтергәндә лә ап-асыҡ күренә, йәғни һөйкәлештең аффиксы составында фәҡәт киң һуҙынҡылар ғына килә: *тот-һа, көл-һә* (ә сингармонизм законы буйынса *тотһо, көлһө* формалары көтөлә). Сөнки шарт һөйкәлеше иң билдәһеҙ, ышанысһыҙ эште аңлата: берҙән, ул алдағы, киләсәктә буласаҡ эште белдерә, икенсенән, шарт ҡылым белдергән эштең үтәлеү-үтәлмәүенә бер ниндәй ышаныс юҡ (уның башҡарылыуына гарантия биреп булмай): *Ул тырышһа, беҙ күрмәй ҡалмаҫ инек. Ул көлһә, беҙгә күңелле була.*

Бүлем һандарының аффикстары составында ла шул уҡ билдәһеҙлекте белдереүсе киң һуҙынҡыларҙы күрәбеҙ: өсәр, йөҙәр (ирен гармонияһы буйынса *өсөр, йөҙөр* булырға тейеш ине), сөнки “бүлем һандары — һандарҙың күплеген белдерә”[17]. Ысынлап та, бүлем һандары һандарҙың күплеген, тик үҙенсәлекле билдәһеҙ күплеген күрһәтә: “Унар формаһы *ун* тигәнде аңлатмай, ә бер нисә унды күҙ уңында тота... икенсе һүҙ менән әйткәндә, ул егермене лә, утыҙҙы ла, ҡырҡты ла һ. б. белдерергә мөмкин (әйберҙәрҙе бүлешкәндә ике, өс, дүрт кеше ҡатнашыуына ҡарап)”.[18]

Шулай итеп, билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһының формалашыуында киң һәм тар һуҙынҡылар (йәғни фонетик саралар) бөтә урал-алтай телдәренең, шул иҫәптән башҡорт теленең дә, грамматик үҫешендә, грамматик аффикстарының, уларҙың билдәле һәм билдәһеҙ варианттарының барлыҡҡа килеүендә ифрат ҙур роль уй-



08-2001.p65 137 30.10.01, 11:36
Black

наған; уларҙың эҙен бөгөнгө телдең һәр бер аффиксында табырға мөмкин. Фонетик сараларҙың урынын, әһәмиәтен һәм ролен күреү хәҙерге телдәге “серле” күренештәрҙе аңлатыуға мөмкинлек бирә. Ж.Кейекбаев үҙенең билдәлелек һәм билдәһеҙлек тураһындағы бөйөк теорияһын башҡорт h.б. ҡәрҙәш телдәрҙең тарихи грамматикаһын тасуирлағанда уңышлы ҡулланды, әммә хәҙерге телдәрҙең “серле” күренештәрен аңлатыу эшенә тотоноп өлгөрмәне. Был эште уның уҡыусылары, ғалимдар, аспиранттар дауам итергә тейеш.

**II Морфологик саралар**

Урал-алтай телдәрендә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, аффикстарҙың бер төркөмө предметтарҙың, йәки эш-хәлдәрҙең билдәле булыуын, ә икенсе төркөмө, киреһенсә, билдәһеҙ булыуын белдерәләр. Мәҫәлән, ҡылымдарҙың хәбәр һөйкәлешен генә ҡарайыҡ: *алды — алған; алыр —аласаҡ.* Хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заманы беҙҙең дәреслектәрҙә *ала//уҡый* тип күрһәтелә. Был форманың мәғәнәһе бик киң, ул хәҙерге заманды ғына түгел, үткәндә һәм киләсәктә булған эштәрҙе лә белдереүе мөмкин. Уның хатта маҡсат мәғәнәһе булған хәл ҡылым урынында ла килеү мөмкинлеге бар: *Ул балыҡ тота китте. Беҙ күлгә һыу инә барҙыҡ.* Шуға күрә лә *ала//уҡый* формаларын йә хәҙерге-киләсәк заман, йә дөйөм заман тип йөрөтәләр. Ә хәҙерге замандың билдәле формаһы аналитик юл менән (төп мәғәнәне белдереүсе хәл ҡылымға *ултыр, тор, ят, йөрө, бар* ярҙамсы ҡылымдары эйәреп килеү арҡаһында) барлыҡҡа килә: уҡып йөрөй, эшләп ята, илап тора, китеп бара. Тарихи күҙлектән хәҙерге замандың аналитик формаһы сағыштырмаса һуңыраҡ барлыҡҡа килгән булырға тейеш, сөнки уның яһалышында боронғо аффикстар ҡатнашмаған (хәбәр һөйкәлешенең үткән һәм киләсәк замандарында тик аффикстар ҡатнашҡан тип иҫбат итергә тырышҡайныҡ), ә ярҙамсы ҡылымдар файҙаланылған. “Төрки телдәренең күбеһендә аналитик элементтарҙың тарихи планда туҡтауһыҙ күбәйеүе күренә”, — тип яҙҙы күренекле тюрколог Э.В.Севортян[19].

Исем һүҙ төркөмөнөң иң мөһим категорияһы килеш һанала. Грамматик килештәрҙең аффикстары (*атының, китаптың, атты, китапты*) предметтарҙың билдәле булыуын белдерә: *Мин китапты алдым. Китаптың битен йыртҡандар.* Был миҫалдарҙа билдәле бер китап тураһында һүҙ бара. Әгәр предметтар билдәһеҙ булһа, бер ниндәй ҙә аффикс ҡулланылмай. Ж.Кейекбаевтың күрһәтеүенсә, “төрки, монгол һәм урал-угор телдәрендә... билдәһеҙ төшөм килештең формаль күрһәткестәре юҡ һәм ул төп килеш менән тап килә”[20]. Ысынлап та, предметтар билдәһеҙ булһа, төшөм килештең бер ниндәй ҙә ялғауы булмай: *Мин китап уҡыйым. Мин хат яҙам.* Йәғни эйәлек һәм төшөм килештәрҙең аффикстары предметтарҙың билдәле булыуын белдерәләр, йәғни билдәле артикль функцияһын үтәйҙәр. Әммә был килештәрҙең билдәһеҙ варианттарын барлыҡҡа килтергән махсус аффикстар юҡ (ҡылымдарҙа бар ине: *алды — алған, ала-сак — ал-ыр*), йәғни улар нуль аффикс менән ҡулланыла. Төбәү-йүнәлеш килештең дә билдәһеҙ варианты халыҡтың йәнле һөйләү телендә осрай, тик ундай форма әҙәби тел нормаһы итеп раҫланмаған, шуға күрә лә ҡулланылышы бөтә бара. Мәҫәлән, *Мин Өфө киттем. Һамар барып ҡайттым.*

Сығанаҡ һәм урын килештәрҙең аффиксһыҙ варианты юҡ (*мин ҡала ҡайттым* йәки *ҡала йәшәйем* тигән варианттар телдә ныҡынмаған), сөнки был ике килеш үҙҙәренең тәбиғәте менән билдәһеҙлек төшөнсәһе менән бәйләнгән, киң пространствоны күҙ уңында тоталар, уларҙы юҡҡа ғына пространство килештәре тип атамайҙар бит. Тимәк, уларҙың аффикстары билдәһеҙлек төшөнсәһен бирәләр, шулай булғас билдәһеҙлекте белдереүсе нуль аффикстың кәрәге юҡ.

Был урында, билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһына таянып, бөгөнгө телебеҙҙәге ҡайһы бер “серле” күренештәрҙе аңлатып була. Мәҫәлән, йыш ҡына күп предметтарҙы белдергән тура тултырыусылар күплек аффиксын да, килеш аффиксын да ҡабул итмәйҙәр: *Уҡыусылар башаҡ йыя. Беҙ еләк тирәбеҙ. Әсәйем колхозда һыйыр һауа.* Был һөйләмдәрҙә бер башаҡ, бер еләк йәки бер һыйыр тураһында һүҙ бармай, киреһенсә, уларҙың һанауһыҙ күплеге күҙ уңында тотола. Ә күплек төшөнсәһе билдәһеҙлек төшөнсәһе менән тығыҙ бәйләнгән, ә билдәһеҙлек, әле генә күрҙек, нуль аффикс менән дә белдерелә ала.



08-2001.p65 138 30.10.01, 11:36
Black

Шулай булғас, үрҙәге һөйләмдәрҙә тура тултырыусылар бер ниндәй ҙә ялғау (аффикс) ҡабул итмәй икән, был законлы күренеш һәм яңы теория күҙлегенән аҡлана. Тағы ла: төрки телдәрендә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, эйә менән хәбәрҙең һанда ярашыуы мотлаҡ түгел, хатта күп осраҡтарҙа мөмкин дә булмай: *Һыуыктар башланды. Каникулдар тамамланды. Ҡоштар кайтты. Йыйылышта сыҕыштар кұп булды* (күп булдылар, тип әйтеп тә булмай). Билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһы күҙлегенән был "ғәжәп" хәлде лә аңлатып була: был һөйләмдәрҙең эйәләре һанап булмай торған һәм мәғәнәләре менән иң билдәһеҙ предметтарҙы аңлаталар: *һыуыктар, каникулдар, сыҕыштар*. Формаль яҡтан улар, күплек һанда торһа ла, иң билдәһеҙ (абстракт) күплекте белдерә, шуның өсөн уларҙың хәбәре күплек аффиксын ҡабул итмәй, нуль аффикс менән килә.

Эйәлек заты ялғауҙары ла предметтарҙың билдәле булыуын күрһәтәләр, йәғни билдәле артикль функцияһын башҡаралар, шуға күрә лә эйәлек заты аффиксын ҡабул иткән исемдәр билдәһеҙ килеш формаларында килә алмайҙар, улар фәҡәт билдәле килештәрҙә генә киләләр: *Ул китабымды бирмәне (Ул китабым бирмәне* тигән форма мөмкин түгел). *Мин атайыңды кұрҙем (Мин атайың кұрҙем* тип әйтмәйҙәр). *Ул балаһын оҙаткан (Ул балаһы оҙаткан* тип әйтеп булмай). Эйәлек заты аффикстары эйәргән исемдәр үҙҙәренең йөкмәткеһе, эске тәбиғәте менән билдәле предметтарҙы белдерәләр: *атым, атың, аты* — был формаларҙа билдәле бер ат тураһында һүҙ бара.

Билдәлелекте һәм билдәһеҙлекте белдереүсе морфологик саралар тураһындағы фекерҙәрҙе йомғаҡлап, шуны әйтергә кәрәк: башҡорт телендәге ялғауҙар (аффикстар) асылда ике функция үтәйҙәр: беренсенән, үҙҙәренең төп функцияһын башҡаралар, йәғни килеш, эйәлек заты, ҡылым һөйкәлештәренең һ.б. аффикстары булып хеҙмәт итәләр *(атты алып кайттым, китаптың хакы арткан; китабыңды биреп тор, китабымдың бите йыртылҕан; Ул китап алды, Ул китап алҕан);* икенсенән, шул ук аффикстарҙың икенсе функцияһы ла бар, йәғни улар предметтарҙың йәки эш-хәлдәрҙең билдәле йәки билдәһеҙ булыуын белдерәләр (миҫалдарҙы ҡарағыҙ). Тимәк, *китапты алдым* әйтемендәге -*ты* аффиксы төшөм килеш аффиксы булып ҡына хеҙмәт итмәй, ә предметтың билдәле булыуын да белдерә.

**III Лексик саралар**

Уларға үҙ ваҡытында Н.К.Дмитриев та иғтибар иткән[21] . Уның күрһәтеүенсә, предметтарҙы белдергән исемдәр алдынан килгән күрһәтеү һ.б. алмаштар уларҙың билдәле булыуын белдерә, шуның өсөн былдай алмаштар менән килгән исемдәр билдәһеҙ килештә килә алмай, фәҡәт билдәле килеш формаһында ғына була: *Был китапты укыным (Был китап укыным* формаһы мөмкин түгел). *Теге кешенең эҙе юк булды (Теге кеше эҙе юк булды* тип әйтеп булмай); *Минең кулымды бәйләнеләр. Минең кулымдың көсөн һиҙҙе (Минең кулым бәйләнеләр. Минең кулым көсөн һиҙҙе* формалары мөмкин түгел).

Ә предметтарҙың билдәһеҙ булыуын белдереү өсөн *бер* һаны ҡулайлашҡан: *бер китап алдым*, тип әйтеп була, әммә *был китап алдым*, тип әйтеп булмай. Шуға күрә *бер* һүҙе әкиәттәрҙә йыш ҡулланыла: *Борон-борон заманда бер бабай менән бер әбей йәшәгән, ти.*

Лексик юл ниндәйҙер кимәлдә һинд-европа телдәрендәге артиклдәрҙе хәтерләтә: *Ich lese das Buch* (Мин китапты уҡыйым) — Ich lese ein Buch (Мин китап уҡыйым).

Әммә артиклдәрҙең бер ниндәй ҙә лексик мәғәнәһе юҡ, ә башҡорт телендәге алмаштар йәки *бер* һүҙе үҙҙәренең лексик мәғәнәһен юғалтып бөтмәгәндәр әле.

**IV Синтаксик юл**

Предметтарҙың билдәле йәки билдәһеҙ булыуын белдереү өсөн, алда һаналған сараларҙан тыш, һөйләмдәге һүҙҙәрҙең тәртибен йәки урынын алмаштырыу алымы ла ҡулланыла: *Мин китап укыйым.* Был һөйләмдә предмет билдәһеҙ, уны белдергән һүҙ ҙә (*китап*) билдәһеҙ төшөм килештә, йәғни нуль аффикс менән килгән. Әгәр был предмет билдәле булһа, йә лексик юл (был, теге һ.б. алмаштар менән), йә морфологик юл (төшөм килеш аффиксы менән) ҡулланылыр ине: *Мин был китапты укыйым* (лексик-морфологик юл); *Мин китапты укыйым* (морфологик юл). Был ике юлдан башҡа синтаксик юл да бар: билдәһеҙ предметты белдергән исем хәбәрҙең алдында килеп, уның менән интонация



08-2001.p65 139 30.10.01, 11:36
Black

яғынан бер бөтөнлөк барлыҡҡа килә: *Мин китап уҡыйым. Мин бүләк алам* һ.б. Был һөйләмдәрҙәге предметтар билдәһеҙ, шуның өсөн улар нуль аффикс менән килгән. Уларҙы билдәле итеү өсөн йыш ҡына уларҙы белдергән тултырыусының урынын алмаштыралар, йәғни һөйләмдең хәбәренән алыҫыраҡ урынлаштыралар. *Китапты мин уҡыйым. Бүләкте мин алам.* Хәбәрҙән алыҫ урынлашҡас, тултырыусылар фәҡәт билдәле килештә генә киләләр һәм предметтарҙың билдәле булыуын күрһәтәләр.

Шулай итеп, башҡорт телендә (һ.б. ҡәрҙәш телдәрҙә лә) билдәлелек һәм билдәһеҙлек грамматик категорияһы бар. Әммә ул һинд-европа телдәрендәге кеүек артиклдәр ярҙамында белдерелмәй, ә үҙҙәренә генә хас булған башҡа саралар (фонетик, морфологик, лексик, синтаксик) ярҙамында сағылыш таба. Күренеүенсә, был грамматик категория башҡа шундай уҡ категориялар менән ҡушылып үҫкән. Жәлил Кейекбаевтың һүҙҙәре менән әйткәндә, “урал-алтай телдәрендә билдәлелек һәм билдәһеҙлек грамматик категорияһы бик ҡатмарлы күренеш һанала. Уның ҡатмарлылығы шунда: был категория иҫкә алынған телдәрҙең бөтә грамматик системаһына үтеп ингән һәм ҡушылып үҫкән; улар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән һәм бер үк ваҡытта ҡылым менән исемдәр сфераһында сағылыш таба. Был ҡатмарлы картинаны асыҡлау урал-алтай телдәрен берҙән-бер система итеп ҡарағанда ғына мөмкин булыр” [22].

Атаҡлы ғалимыбыҙҙың был гениаль һүҙҙәре фән юлына баҫҡан йәштәр өсөн программа булып яңғырай.

## ИҪКӘРМӘЛӘР


1 Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка. — М.-Л., 1948. — С.217-218.

2 Киекбаев Дж.Г. О генетическом единстве формы определенности в сфере имени и глагола в урало-алтайских языках / Сб. “Вопросы методологии и методики лингвистических исследований”. — Уфа, 1966. — С. 248-249.

3 Бертагаев Т. Морфологическая структура слова в монгольских языках. — М., 1969. — С.54.

4 Благова Г.Ф. Плеонастическое использование аффиксов в тюркских языках в историческом освещении // Вопросы языкознания. — 1968. — №6.— С.84.

5 Махмутова Л.Т. Мензелинский говор // Материалы по татарской диалектологии. —Казань, 1962. —С.67.

6 Башҡорт теле: урта мәктәптең 7-се синыфы өсөн дәреслек. — Өфө, 1966.— 120-се бит.

7 Зайнуллин М.В. Категория времени глагола изъявительного наклонения. — КДА, Казань, 1963. — С.18.

8 Джураева Д.М. Времена глагола в узбекском языке. //Вопросы категории времени и наклонения в тюркских языках. — Баку, 1968. — С.87.

9 Кенесбаев С.К. и др. Казахский язык. //Языки народов СССР. II том. — М., 1966. — С.331.

10 Батманов И.А. Части речи в киргизском языке. — Фрунзе, 1936. — С. 25.

11 Девону луғатит турк. — Ташкент, 1967. — 482-се бит.

12 Киекбаев Дж.Г. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. — Уфа, 1966. — С. 153-165.

13 Кейекбаев Ж.Ғ. Башҡорт теленең фонетикаһы. — Өфө, 1958. — 127-се бит.

14 Тумашева Д.Г. Көнбайыш себер татарлары теле. — Казан, 1961.— 66-сы бит.

15 Ширалиев М.Ш. Интерпретация некоторых изоглосс диалектического атласа восточной группы диалектов и говоров азербайджанского языка. // Вопросы диалектологии азербайджанских языков. — Фрунзе, 1968. — С.29.

16 Ахметов М. Глагол в языке Орхоно-Енисейских памятников. — Алма-Ата, 1970. — С. 125-128.

17 Киекбаев Дж.Г. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. — Уфа,1996. — С.336.

18 Шунда уҡ.

19 Севортян Э.В. Современное состояние и некоторые вопросы исторического изучения тюркских языков... // Вопросы методов изучения истории тюркских языков. — Ашхабад, 1961. — С.23.

20 Киекбаев Дж.Г. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. — Уфа, 1996. — С.15.

21 Дмитриев Н.К. Күрһәтелгән хеҙмәт. — 217-се бит.

22 Киекбаев Дж.Г. О грамматической категории определенности и неопределенности в урало-алтайских языках. // Советское финно-угроведение. — 1965. — №3. — С.237.




08-2001.p65 140 30.10.01, 11:36
Black